***Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,***
***“Ватандаш” журналының тәүге баш мөхәррире,***
***академик***

# Заманыбыҙ ауазы



“Ватандаш” журналы идеяһы тәүге тапҡыр I Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайында, 1995 йылда әйтелде, һәм был ҙур форумда хупланып, резолюцияларға индерелде. Бер төркөм ғалимдар, яҙыусылар, йәмәғәт эшмәкәрҙәре менән кәңәшләшеп, баҫмаға тәүҙә “Башҡорт донъяһы” исемен бирергә теләгәйнек. Мин үҙем журналды тик башҡорт телендә генә сығарыу яҡлы инем, һуңынан уны башҡорт һәм рус телдәрендә сығарып, айырым мәҡәләләрҙе инглизсә биреү фекеренә килдек. Баҫмаға “Ватандаш” исемен бирергә булдыҡ. Әлбиттә, бындай ҙур эште республика хөкүмәте ярҙамынан тыш башҡарып сығыу мөмкин түгел ине. Был йәһәттән ул саҡтағы БР Дәүләт рәйесе Мансур Әйүпов ныҡ ярҙам итте. Мансур Әнүәр улы матбуғат өлкәһендә тәжрибәле кеше, заманында “Совет Башҡортостаны” гәзите баш мөхәррире булды. 1996 йылдың 26 ғинуарында БР Министрҙар Ҡабинетының “Ватандаш” журналын ойоштороу тураһындағы ҡарары донъя күрҙе. Нәҡ ошо датаны “Ватандаш”тың тыуған көнө тип билдәләргә була.

Журналистар коллективы туплау, редакция эшен көйләп ебәреү осоронда яуаплы сәркәтип Миңлеғәли Яҡупов, баш мөхәррир урынбаҫары Мәүлит Ямалетдинов, бүлек мөхәррире Рәүеф Насиров һәм башҡа журналистика ветерандарының оло тәжрибәһе ҡуйылған бурыстарҙы атҡарып сығырға ныҡ ярҙам итте. Яйлап ул ветерандарға яңы көстәр өҫтәлә торҙо. Әлбиттә, бындай ҡатмарлы баҫманы үҙләштереү, йүнәлештәрҙе билдәләү, авторҙар даирәһен формалаштырыу еңелдән булманы.

Күреп, күҙәтеп торам — журналист коллегаларымдың эше бөгөн дә шулай уҡ яуаплы, ҡатмарлы булып ҡала. Замана талаптары үҙгәреп тора, республикала һәм илдә мәғлүмәт даирәһе лә етди үҙгәрештәр кисерә. Матбуғат хеҙмәткәрҙәренә ул үҙгәрештәрҙән, үҫештән ҡалышырға ярамай. Был журналдың техник башҡарылышына, биҙәлешенә ныҡ ҡағыла — ул сифаттары донъя стандарттары кимәленә яҡын булырға тейеш. Йәнә, хәҙер периодик баҫмалар электрон версияларға күсеү осоро кисерә. Заман башҡа — заң башҡа, тигәндәй, ул яғын да тейешенсә көйләп ебәрергә кәрәктер инде. Әммә ҡәҙимге, ҡағыҙ журналды ла һаҡларға кәрәк. Бөгөнгө журналист коллегаларыма төп теләгем шул — баҫманың төп йүнәлештәре, рухы һаҡланып, киләсәк быуындар ҙа ҡыҙыҡһынып уҡырлыҡ, яңы дәүер ғалимдары ла мөрәжәғәт итерлек әйберҙәр күберәк донъя күреп ҡалһын ине. Заманыбыҙ ауазы быуаттар аша ла яңғырарлыҡ булһын!